# Китап уҡыусылар күберәк булһын

***Аҫҡарҙа иҫтәлекле урындар, һәйкәлдәр арта бара. Ағымдағы йәйҙә үҙәк район китапханаһы алдында йәнә бер һәйкәл ҡалҡып сыҡты.***

БАШКОРТОСТАН 100 1919–2019

Гөлнара КҮСӘРБАЕВА

Унда китап һынландырылған. Ябай китап түгел ул: бер битенән бөйөк мәғрифәтсебеҙ Мифтахетдин Аҡмулла баға, икенсеһендә уның белем алыуға, уҡыуға өндәгән: «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк! Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк...» — тигән шиғри юлдары яҙылған.

XIX быуат сәсәне Аҡмулланың был һүҙҙәре бер ҡасан да иҫкермәй. Бөтөн буш ваҡытты интернет урлаған хәҙерге заманда бигерәк тә көнүҙәк улар. Бөгөн йәштәр, мәктәп уҡыусылары башлыса электрон ысулда уҡыуға өҫтөнлөк бирә. Халыҡ китапхана юлын һыуытты. Ә бит унда күпме баҫма хазина һаҡлана — классик әҫәрҙәр, фәнни, тарихи әҙәбиәт, балалар өсөн китаптар, ваҡытлы матбуғат...

— Әлеге һәйкәл китапхана янынан үтеүселәрҙе белем алырға, уҡырға өндәп, саҡырып торһон тигән ниәттән ҡуйылды, — тип һөйләй уның идея авторы, район ветерандар советы рәйесе А. Ғ. Төлкөбаев.

Әйткәндәй, башта был урынға тыл хеҙмәтсәндәре һәм һуғыш балаларына һәйкәл ҡуйылған ине. Уны икенсе урынға күсергәс, бетон постамент буш ҡалды. Өҫтәүенә тәүге һәйкәл өсөн район халҡынан йыйылған аҡса ла артты. Ошо ике сәбәп китапхана алдына тематик һәйкәл ҡуйырға этәргес булды, тип дауам итә Ансар Ғаттар улы.

Аҡмулла һынландырылған китап — Магнитогорск ҡалаһынан скульптор Сергей Елкиндың Әбйәлилдәге икенсе эше. Тыл хеҙмәтсәндәре һәм һуғыш балалары һәйкәле шулай уҡ уның ижад емеше. Һынлы композиция тулыһынса эшләнеп бөтөлмәгән әле. Китаптың аҫтында өҫтәл урынлашасаҡ.



Абзелил. – 2019. – 12 июля. –